

Раул ШАММАС

# “Атлайыҡ әле, белмәй туҡтауҙы!”

## Шиғри усаҡ

Әсәйемдең бер әйткәне
Иҫемә төштө тағы.
Уның күңеле булған икән
Шиғриәттең усағы.

“Кеше ғүмерлек көн итә,
Мәңгелек, тиеп йәшәй”.
Уҡый-яҙа белмәһә лә,
Шағирә булған әсәй.

Күптән баҡыйлыҡта улар,
Әммә онотолмайҙар.
Бәлки, мәңге йәшәр булып,
Тыуаларҙыр ундайҙар.

Тәбиғәт тә мәңгелек бит,
Кеше — уның балаһы.
Ҡай берәүгә уның менән
Мәңге бергә бараһы.

Ундай бәхет һәр кемгә лә
Теймәй, быны беләбеҙ.
Ундай яҙмыш ҡаршыһында
Башыбыҙҙы эйәбеҙ.

Әсәй әйткән мәңгелекте
Шиғырыма әйҙәнем.
Уның фатихаһы менән
Мин шағирға әйләндем.

## Артта ҡалмай шәп саҡтар

Шәп саҡтар артта ҡалды, тип
Әйтмәле, йәнкиҫәгем.
Бөгөнгөнөң итәгенә
Тотоноп бара кисәгең.

Булды, булды ул шәп саҡтар,
Кеҫә тулы борсаҡтар.
Беҙҙең күңел ул саҡтарҙың
Төҫөн юғалтмай һаҡлар.

Көҙ килгәндә, ҡыш килгәндә
Онотмайыҡ яҙҙарҙы.
Юғалтмайыҡ, һыуытмайыҡ
Йәшлектәге наҙҙарҙы.

Бер-беребеҙҙе күрер өсөн
Әллә ни бирер саҡтар.
Күңелдәрең моңһоуланһа,
Хәтер дәфтәрен аҡтар.

Хәтерлә һин һандуғаслы,
Моңло ауыл кистәрен.
Дөрләт, әйҙә, мөхәббәттең
Нәзәкәтле хистәрен.

Беҙҙән һуңғы быуындар ҙа
Шул хистәр менән атлар.
Ҡартлыҡта ла һөйөү һаҡлар,
Артта ҡалмай шәп саҡтар.

## *Йәшәйек әле*

Ҡанатланып йәшәп ятам әле,
Һикһән бишем тиҙҙән килә, тип.
Шаммас шәме булып шиғырҙарым
Халҡым юлына нурҙар һибә, тип.

Һикһән бишем генә сик булмаһын,
Атлайыҡ әле, белмәй туҡтауҙы.
Уйланып та, берсә йылмайып та
Саҡыра мине алда тукһаны.

Ҡартлыҡтың да бар ул үҙ бәхете,
Бәхетлебеҙ, яҡын дуҫтарым.
Хеҙмәттә ул бәхет, эш бирегеҙ,
Эш бирегеҙ, ҡысыта устарым.

Күгәрсендәр кеүек гөр-гөр килеп,
Йәшәйексе, булып йөҙйәшәр.
Һеҙҙең менән рәхәт һәм күңелле,
Эй, ҡәҙерле дуҫтар, иптәштәр.

## *Белмәгән аңлаһын*

Ҡарттарҙың әйткәне
Аса бит күҙҙәрҙе —
Хәтергә төштө әле
Атайҙың һүҙҙәре:

“Һин бөтә донъяны
Ҡосаҡлай алмайһың”.
Берәүҙәр, әйтерһең,
Донъяның аллаһы.

Мин генә, тик мин бар,
Хужа, ти, барына.
Уйламай баҫҡанын
Баҡсаһы ярына.

Ихтимал был ярҙың
Ишелеп китеүе.
Булғандың һәммәһен
Көл-күмер итеүе.

Һиҙмәй ул саманың
Саманан ашыуын.
Уйламай, онота
Нәфсенең шашыуын.

Тик үҙен яратыу
Кешене аҙҙыра.
Берәүҙәр — асфальтта,
Берәүҙәр һаҙ йыра.

Туҡ белмәй ас хәлен,
Һау әҙәм — сирлене.
Кем, ҡасан тыуҙырған
Был ҡәһәр кирене?

Ни тиклем үҙеңде
Көслө, тип һанама,
Ҡанун бер: һин — кеше,
Бар тормош, бар сама.

Һин бөтә донъяны
Ҡосаҡлай алмайһың.
Белгәндәр белерҙәр,
Белмәгән аңлаһын.

## *Ялҡын бөтмәгән икән*

Йәрәшәйек, ҡауышайыҡ,
Аралар яҡын икән.
Йөрәгемдә һиңә тигән
Дөрләгән ялҡын икән.

Яңғыҙ ғына йәшәүҙәре
Бик ауыр, һалҡын икән.
Күҙем төшөп, ғашиҡ булып,
Яңынан балҡы икән.

Мөхәббәтем ҡанат бирер,
Талпынып ҡалҡын, иркәм.
Беҙ ҡауыштыҡ, бергә йәшәү —
Үҙе бер алтын икән.

Йөрәктәрҙә һаман әле
Ялҡын бөтмәгән икән.
Күңел гелән, һай, гөлгөнәм,
Һине эҙләгән икән.

## *Ҡыуаныстарым сикһеҙ*

Үкенмәйем, һөйөнәм тик
Был ергә тыуғаныма.
Шуны әйтеп үткем килә
Мин кеше туғаныма.

Шиғри фәлсәфәләр ҡороп,
Күптәрҙе уйландырҙым.
Ғәмһеҙ ятҡан әҙәмдәрҙе
Йоҡонан уяндырҙым.

Шаянлыҡ та ят булманы,
Көлдөм дә, көлдөрҙөм дә.
Зарланмайым, бәхетлемен,
Һөйҙөм дә, һөйөлдөм дә.

Миңә һыя һәммәһе лә,
Күңелем асыҡ, бикһеҙ.
Шундай яҙмыш кемгә тейә?
Ҡыуаныстарым сикһеҙ.

Юғалтыуҙарым да булды,
Уларын һанамайыҡ.
Хаталар ҙа бар инде, бар,
Үткәнде ҡарғамайыҡ.

Иртән торам мин, һағынып
Кешеләр йылмайыуын.
Һәр аҙымдан көткөм килә
Кешеләр ҡыуаныуын.

Илап ҡына түгел, көлөп
Йәш сабыйҙар тыуһындар.
Шикләнеүҙәр, бикләнеүҙәр
Йырағыраҡ торһондар.

Донъя бит ул, һәммәһе бар:
Яҡшыһы ла, яманы.
Берүк яҡынлай күрмәһен
Яманлыҡтың ялмауы.

Яҡшылыҡ тигән бикәне
Бына барам ҡултыҡлап.
Йөрәк тибә, тимәк, теремен,
Йөрәк тибә һулҡылдап.

Йәшәүҙән дә ҡәҙерлерәк
Нимә бар һуң, нимә бар?
Яҡын килмәй тороғоҙ әле,
Ҡартлыҡ биргән сир-маҙар.

Күңел ишегем һәр саҡ асыҡ,
Күңел ишегем бикһеҙ.
Ҡыуанамын, йыуанамын,
Ҡыуаныстарым сикһеҙ.

## *Күр, бел, уйла*

Берәүгә лә һөйләмәҫлек төштәр була,
Ғүмер буйы тик сер булыр эштәр була.
Иҫ китерлек, таң ҡалырлыҡ гөлдәр була,
Әммә емеш бирә алмай шиңә, һула.

Кешеләрҙең йәшәйеше, эй, ҡатмарлы,
Бөтәһен дә барлап барыр сара бармы?
Күңелдәрҙә кеше күпме серҙе һаҡлап,
Асылмайса ҡаршы ала һуңғы ярҙы.

Ни итәһең, кеше ғүмере шулай инде,
Сәскә атып, донъя йәмләп, һулый инде.
Йәшәнем, яҙмышым шул, тип йыуанып,
Үҙенсә ул риза ла була инде.

Был тормошта бындай хәлдәр бик йыш була,
Асыл гөл дә емеш бирә алмай һулый.
Уҡыусыма әйтеп бирер һүҙем шул ла:
Йәшә, һоҡлан, күр, бел һәм дә уйла.



## *Мин төшөмдә күрҙем йәш сағымды*

Мин төшөмдә күрҙем йәш сағымды:
Урта мәктәп сығам тамамлап.
Ауыр заман, бары ла наҡыҫ инде,
Тотонабыҙ барын самалап.

Рәхмәт, тимен бөгөн бәрәңгегә,
Йәш үҫмерҙе ул ас итмәне.
Ни итәһең, булманы шул ул саҡ
Ауыҙ тултырып ҡабыр икмәге.

Теҙ башында ямау, әле оялам,
Салбар алыр хәл дә юҡ ине.
Ул ваҡытта кеше йөрәгендә
“Юҡлыҡ” тигән хәтәр ут ине.

Йәшлек йәшлек инде — йөрөй инек,
Урам урап, ҡыҙҙар оҙатып.
Ауырлыҡтың барын артҡа ташлап,
Һөйөү әкиәттәрен уятып.

Гармунымды ҡуйғас теҙ башына,
Оялыуҙы торҙом онотоп.
Йәшлек дәрте, ах, был йәшлек-ялҡын
Ҡыуа килде юҡлыҡ-болотто.

Ә уҡыуға булған дәрт һәм ялҡын
Һаман беҙҙе алға әйҙәне.
Гел йылмайып ҡаршы ала ине
Стәрленең күркәм мәктәбе.

Сығарылыш кисәһенә ул көн
Атам-әсәм килеүе урынлы.
Нисек инде мөмкин тәбрикләмәү
Көмөш миҙал алыр улыңды?

Тәғәм аҡсаһынан өҙөп инде
Миңә костюм алған үҙҙәре.
Өҫтөмдәге кейемемде күреп,
Ҡояш булып балҡый йөҙҙәре.

Ҡанатлы ине хыял — уҡыу теләге
Өфө—Ҡазандарҙы ураны.
Тик үҙенән ары ебәрмәне
Стәрленең ыжғыр бураны.

Мин төшөмдә күрҙем йәш сағымды...
Салбар ямауына оялдым.
Барыбер баҫтым Тукай юлына, тип,
Бөтә йөрәгем менән ҡыуандым.

## *Күңел ҡанаты*

Күңел ҡанатын
Эҙләмә ситтән,
Тышҡы мөхиттән.
Үҙеңдә ул, үҙеңдә,
Тәбиғәтеңдә.
Тик таба ғына бел,
Бар ул һәр кемдә.

Үҙеңде белеү
Ауырыраҡ ул,
Ауырыраҡ.
Мөмкинлектәрең
Үҙең белгәндән
Ҙурыраҡ ул,
Ҙурыраҡ.

Күңел ҡанатын
Таба алдыңмы —
Ул нурлар һинең
Барыр юлыңды.

Ҡеше көслө ул,
Бөтәһен еңә —
Күңел ҡанатын
Тик елпе генә.

Ауыр сир килмәй,
Артҡа сигенә —
Күңел ҡанатын
Тик елпе генә.

Йәшлек ялҡынын
Оҙаҡ һаҡлай ул.
Ҡартлыҡҡа барыр
Эҙҙе ҡаплай ул.

Күңелеңдә дәрт
Һүнә күрмәһен.
Күңел ҡанатың
Талпынһа ғына,
Үргә үрләрһең.